***Ирек КИНЙӘБУЛАТОВ,***
***Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты***

# Хәтер һағында

*“Ватандаш” остазыма*



Тоғро һалдат һымаҡ постаһың һин,
Хәтер менән выждан һағында.
Байҡайһың һин тарих төпкөлдәрен,
Сал быуаттар тирә-яғында.

Үткер ҡарашыңа һис сиктәр юҡ,
Күреп тәүтормошто, хәҙерҙе.
Эҙләнәһең зирәк күҙҙәр менән,
Һис тә көтөп ятмай әҙерҙе.

Уяу тораһың һин изге поста,
Уяу тотор өсөн хәтерҙе.
Хаҡлыҡты бит хаҡлыҡ итә ала,
Тарих раҫлай алһа әйтерҙе.

Беҙҙең тарих тарихтан да оло,
Яҙырға ла әле яҙырға.
Күпме биттәр әле асылмаған,
Кәрәк күпме сиҙәм ҡаҙырға;

Меңәр йыллыҡ йәшәү өлгөләрен
Хазиналар итеп һаҡларға,
Беҙ булғанды, мәңге буласаҡты
Ғаләм алдарында аҡларға.

Ҡанбабалар күңеленән ҡалған
Ҡәҙерләйһең алтын мираҫты;
Шәреҡ менән Ғәреб аҡылдарын
Йәшермәгән әле ер аҫты.

Саң ҡағаһың, дөрләтеүсе булып
Халҡыбыҙҙың милли уҙаңын.
Алһыҙ-ялһыҙ ихлас һөртәһең һин
Күңел йоҡомһорау туҙанын.

Усаҡтарҙа утты һүндермәҫкә,
Тығылмаҫҡа мөрйә-төтөнлөк,
Тулы ҡанлы тормош яҡтыртаһың —
Беҙҙең барлыҡ, беҙҙең бөтөнлөк.

Халыҡтар һәм илдәр араһында
Иҫбатлайһың беҙҙең тиңлекте,
Бар донъяға еткерергә теләп
Милләтемдә күңел киңлекте.

Раҫлайһың һин барлыҡ булмыш менән
Бар ғаләмгә йөҙҙәр аҡлыҡты,
Туған телем менән ер йөҙөндә
Мәңге йәшәү өсөн хаҡлыҡты.